Илһамова, урыҫ мәктәбендә бер нисә йыл эшләп килгән Рина Мөхәмәт ҡыҙы Минһажева-Уразаева, фекерҙәштәрем-шәкерттәрем Зилә Шәфҡәт ҡыҙы Яппарова, Рәйсә Абдрахман ҡыҙы Күзбәкова, Диана Диас ҡыҙы Закироваларҙы онотоу мөмкинме һуң?! Уйҙар үткәнгә ҡайтҡан һайын уҡытыусы-тәрбиәселәр Ғәҙилә Таһировна, Рәйсә Гәрәевна, Зөбәйҙә Фәсхетдиновна, Хәбирә Хәбировна, Зөлфиә Ташбулатовна, Гөлсирә Камиловна, Гөлсирә Ғилмановна, китапханасы Зилә Сәлимйән ҡыҙы һәм башҡаларҙы йылы хистәр менән иҫкә алам. Ваҡытында үҙ эштәренә баһа ла һорамаған, тик эш өсөн яратылған быуын кешеләре ине улар. Уҡытыусы башҡа кеше тормошо менән йәшәй бит ул. Бишектәге баланы әҙәм итеп осороусы бит ул уҡытыусы, Рәми Ғарипов әйтмешләй,

”Бишектәге бала биш төрләнеп,
Ат атланып сапмаҫ, тимәгеҙ!”

Балаларҙың атҡа атланып сабып киткәнен ҡул болғап оҙатып ҡалыусылар беҙ, уҡытыусылар, бөгөн дә уларҙың йөрәк тибешен тойоп йәшәйбеҙ.

***Гөлсирә ҠАҒАРМАНОВА,***
***Фатима Мостафина исемендәге***
***20-се һанлы Өфө ҡала башҡорт гимназияһы***
***директоры урынбаҫары***

# 20-се мәктәп-гимназия традицияларын һаҡлай

Торғонлоҡ осоронда, милли мәктәптәргә иғтибар аҙ булған саҡтарҙа асылып, төрлө ауырлыҡтар менән эшләп килгән 20-се мәктәп 90-сы йылдарҙағы үҙгәрештәр башланғас юғалып ҡалманы, ә киреһенсә, тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә үрләне.

1990 йылда директор булып Х.С.Хәйбуллин килеү менән, мәктәп коллективы йәмғиәттәге демократик үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, балаларға белем-тәрбиә биреү эшендә эҙләнеүҙәр юлына баҫты: яңы тормош шарттарында үҙенә урын табырлыҡ, халҡына уңышлы хеҙмәт итә алырлыҡ шәхес тәрбиәләү бурысы ине алда. Ошо юғары маҡсаттар 20-се мәктәпте гимназия статусына еткереп, уҡытыу технологияларын инновациялар нигеҙенә күсереүгә алып килде. Ошо эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн ”Ватан” ғилми-тикшеренеү үҙәге булдырылды. Гимназияның алдынғы уҡытыусылары үҙәкте етәкләгән ғалимдар менән берлектә республикалағы башҡортса уҡытылған башланғыс синыфтар өсөн инновацион технологиялар әҙерләне. Ф.Ш.Сынбулатова һәм Ә.Т.Мәүлийәрова ”Камил-

лыҡҡа әйҙәүсе уҡытыу” системаһына нигеҙләнгән яңы дәреслектәр яҙҙылар, уҡытыу программаларын яңырттылар.

Элек гимназияларҙа кәмендә биш тел өйрәнгәндәр. Бөгөнгө көн талаптарына яуап итеп, гимназияла өс тел төплө, тәрән итеп өйрәнелә башланы. Инглиз телен беренсе синыфтан башлап өйрәнеү буйынса үткәрелгән эксперименттар ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. БДПУ доценты М.А.Хәсәнов, тәжрибәле уҡытыусылар Р.М.Уразаева, Д.Д.Закирова сит телде башҡорт теле аша өйрәтеү методикаһын эшләп, программалар, дәреслектәр, методик әсбаптар нәшер итепде. Һуңғы ике йыл гимназия базаһында Америка-башҡорт интерколледжы халыҡ-ара мәғрифәтселек программаһын тормошҡа ашыра. Ул программа ”Инглиз теле һәм Америка Ҡушма Штаттарын өйрәнеү” тип атала. Был алдынғы проект АҠШ-тың Рәсәйҙәге илселеге хуплауы нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Быйыл май айында бер төркөм гимназистар АҠШ илселегендә инглиз теле һәм мәҙәниәте буйынса атташе булып хеҙмәт иткән Бриджит Герштен ҡулынан ике йыллыҡ курстар тамамлау тураһында сертификаттар алды.

I—IX синыфтарҙа уҡытыу башҡорт телендә алып барыла. I синыфҡа килгәндә бер ауыҙ һүҙ ҙә башҡортса белмәгән балалар гимназия тамамлағанда саф башҡортса һөйләшеп, атай-әсәйҙәрен, олатай-өләсәйҙәрен, уҡытыусыларын ҡыуандырып сығып китә. Гимназияла бөтә тәрбиәүи саралар тик башҡорт телендә генә үтә. Был башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, гөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү маҡсатында эшләнә.

Гимназия уҡыусылары район, ҡала һәм республика кимәлендә ойошторолған олимпиадаларҙа, бәйгеләрҙә һәм ғилми-практик конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша. Мәсәлән, үткән уҡыу йылында Фатима Янбаева, Гөлнур Ҡарабулатова, Дания Кираева, Гөлназ Самарбаева, Фидан Минғәлишев, Илмир Ҡаһарманов, Лиана Сөләймәнова, Гөлли Бикбова төрлө кимәлдәге бәйгеләрҙә призлы урындар яуланы.

Гимназияла һыналған, көслө уҡытыусылар коллективы эшләй: 24 уҡытыусы юғары, 15 уҡытыусы беренсе категориялы. Ошо уҡытыусылар араһынан Д.А.Хоҙайбирҙина ”Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы” исеменә лайыҡ булған. Р.М.Уразаева (инглиз теле уҡытыусыһы), С.А.Ишбулатова (башланғыс синыфтар уҡытыусыһы), С.Т.Камалиев (география уҡытыусыһы), Г.К.Ҡаһарманова (тарих һәм йәмғиәт белеме уҡытыусыһы), З.Т.Бураншина (химия уҡытыусыһы), Р.М.Илһамова (рус теле уҡытыусыһы), М.А.Мәҡсүтова (математика уҡытыусыһы), Т.Я.Бикбаеваларға (башҡорт теле уҡытыусыһы) ”Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы” исеме бирелде. Гимназияла эшләгән 52 уҡытыусы 10 методик берекмәгә берләшкән. Коллективты тәрән белемле, алдынғы ҡарашлы, хәстәрлекле һәм аҡыллы директор — Илдар Азат улы Моталов етәкләй.

Бөгөн Фатима Мостафина исемендәге 20-се һанлы Өфө ҡала башҡорт гимназияһы яңырыу осоро кисерә: Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов, Совет районы хакимиәте (хакимиәт башлығы Фоат Йомағолов) беҙҙең гимназия бинаһында реконструкция һәм капиталь ремонт үткәреүҙе кәрәкле тип тапты һәм үҙҙәренең ныҡлы күҙәтеүҙәре аҫтына алды. Гимназия киләсәккә ҙур өмөттәр менән ҡарай.